*Ринат ШӘЙБӘКОВ*

# ЙӨЙӘГЕМ – ТӨЙӘГЕМ

Белорет районының Йөйәк ауылы бик боронғоларҙан һанала. 90-сы йылдар аҙағына тиклем ауылдың рәсми исемен башҡортса Зөйәк тип атап йөрөтә торғайнылар, был исем ауылға русса «Зуяково» тип тәржемә ителеп шулай нығынып киткән. Руссаһы ла дөрөҫ атама түгел. XVIII быуат документтарында ауыл русса «Зюяково» формаһында осрай. Былары туранан-тура русса яҙылған документтар, ә бына XIX быуат яртыһындағы бер документ тәүҙә төрки телдә яҙылып аҙаҡ ҡына урыҫ теленә тәржемә ителгән. Унда русса тәржемәлә Йөйәк ауылын «Юяково» тип яҙып киткәндәр. Тимәк, ауыл исеме ваҡыт үтеү менән ошолай үҙгәреш кисергән: Йөйәк—Юяк—Зюяк—Зюякова—Зюяково—Зуяково. Ауыл исеме Инйәргә ҡойоусы йылға исеменән алынған (ауыл тәүҙә шул йылға буйында утырған). Тимәк «Йөйәк» антропоним түгел, шулай булғас, «-ово» ялғауы атамаға ҡушылырға тейеш түгел, ауыл исеме антропонимдан алынған булһа ғына «-ово», «-ино» ҡушыла бит (мәҫәлән: чья деревня? — Габдюкова—Габдюково). Ә йылғаға Йөйәк атамаһы ҡушылыуын ололар былай аңлата: Тау йылғаһы яҙын ныҡ таша, ярҙарынан сыға, яңы йырҙалар яра, икенсе урындан аға башлай, элекке йырҙалар ер өҫтөндә йөй булып тороп ҡала. Йөйәк — ерҙә йөй (эҙ) яһаусы йылға. Башҡа варианттар хәҡиҡәткә бик үк тап килеп етмәйҙер. Мәҫәлән, Сафа бабай Исмәғилов, халыҡ һуғым итен ашағандан һуң һөйәктәрен гел йылғаға ташлап барған, шуға һөйәк ташлаған йылғаны «һөйәкле йылға» — «Һөйәк» тип атағандар, «Һөйәк» яйлап «Йөйәк»кә үҙгәргән, тип аңлатҡайны. Ошо вариантҡа мин тәүҙә бик әһәмиәт бирмәгәйнем, тик әлеге көндә, дингә иғтибар артҡан бер ваҡытта, йылғаға һөйәк ырғытыу ысынлап та дөрөҫ булғанлығын белдем. Иҫәнғәле бабай Шәһивәлиев миңә ҡорбанға салынған малдың һөйәктәрен эт-ҡош ашарға тейеш түгел, уны йә ергә күмер, йә булмаһа тәрән һыуға ташлар булғандар, тип аңлатты. Тик шулай ҙа «һөйәк»тең «йөйәк»кә әйләнеп китеүе бик үк ышандырып етмәне мине. Ауылға исемде уға тәү башлап килеп ултырған кеше исеменән биргәндәр, йылға ла ауыл исеменән аталған, сөнки йылға буйында был ауыл берәү генә, тигән вариант та бик үк ышандырмай, сөнки Йөйәк исемле кеше башҡорттарҙа осрағаны юҡ. 20-се йылдарҙа Ҡатай төбәгендә билдәле крайҙы өйрәнеүсе М.Ф.Чурко «-ово», «-ино» ялғауҙарын бик белеп ҡушып яҙа: «Первая осела Усман-Галина, затем Зюяк, Ассы, Бриш и наконец один из сыновей Кулман-тархана основал Габдюково...» («Исторический очерк Тамьян-Катайского кантона», Уфа, 1927 г.). Ул яҙып алған риүәйәтте руссаға тәржемә иткәндә Усман-ғәле, Ғәбдүк ауылдарының кеше исеменән, Йөйәк, Берештең йылға исеменән, ә Асы минераль сығанаҡлы тоҙло, әсе һыу сыҡҡан урында урынлашҡан өсөн шулай аталғанын бик белгән. 1998 йылда ауылдың исеме Йөйәк (руссаһы —



09-2001.p65 165 29.08.01, 12:51
Black

Зуяк) формаһында рәсмиләштереләре.

Йөйәк ауылы халҡы, башҡа Инйәр буйы ауылдары халҡы кеүек үк, Инйәр ҡатайҙары ырыуына ҡарай. Ауыл тәү башлап 1761 йылғы ер һатыу документында иҫкә алына: 1759 йылда Ҡатай волосы аҫабалары Инйәр буйындағы Татлы һәм Аҫылғужа ауылдары араһында ятҡан ерҙәрен заводчик Демидовҡа аренда биләмәһе итеп бирә. Купчийға 1761 йылда 156 ҡатай вотчинниғы менән бергә Йөйәктән Аяз Тоғушаев (Тоғумаев?) менән Сәфәр Ҡасҡаев тамғаларын ҡуя.

Ауыл, әлбиттә, ошо тәү иҫкә алынған ваҡыттан күпкә алдараҡ барлыҡҡа килгән. Сөнки билдәле сығанаҡтар буйынса ҡатайҙар Рус дәүләтенә ҡушылырҙан да алда, табындарҙың көнбайышҡа күсеүҙәренән алдараҡ, Инйәр буйында төйәкләнгәндәре билдәле. Ҡатайҙар Себер ханы Ибаҡ эҙәрләүенән ҡасып барыусы табындарға ер бирмәгәс, улар меңделәргә барып һыйынған. Инйәр буйы ауылдары үҙҙәренең Инйәр буйындағы тәүбабалары итеп Ҡолман тарханды иҫәпләүҙәре тураһында байтаҡ сығанаҡтар билдәле. Был Ҡолман тархан табанына ҡама тиреһе йәбештерелгән саңғы кейеп батшаға барған, бик күп йәнлек тиреләре бүләк иткән, был бүләктәрең өсөн нимә кәрәк, тип һорағас, ул Инйәр буйындағы ерҙәргә ҡағыҙ яҙҙырып алып ҡайта. Ҡолман тураһында таралған күп риүәйәттәрҙең бер вариантын мин 1982 йылдың 17 апрелендә Ғәбдүк ауылы Нөғәмәнов Әхмәҙғәле бабайҙан (1914 йылғы) яҙып алған инем, тулы көйө ваҡытында «Совет Башҡортостаны»нда ла, «Ленинсы»ла ла, район гәзитендә лә баҫтырған инем. Ҡолман тураһында ул йылдарҙа Ғәбдүктән Абдулла бабай Абдрахманов (1899 йылғы), Асынан Сәмсетдинов Йосоп бабай ҙа (1900 йылғы) иҫләйҙәр ине. 1928 йылда Н.К.Дмитриев етәкселегендәге экспедиция ағзаһы М.М.Билалов Йөйәк ауылынан 52 йәшлек Нурғәле Әхмәҙиевтан риүәйәттең бер вариантын яҙып алған булған. Был турала «Бюллетень Башкирского областного бюро краеведения» тигән сығарылыштың 1928 йылғы 3-сө һанында, экспедиция тураһындағы ҡыҫҡаса отчеттан, тағы ла «Ватандаш» журналының 2000 йылғы 10-сы һанынан белеп була. Әхмәҙғәле бабай вариантында, Муллаҡай ауылы ҡарты «Ҡотһоҙ Ҡолман» Ҡоро Ҡыйырымды, һыулы Йылыуымды (Ләмәзгә ҡойоусы йылғалар) алды, тип илаған, тиелә. Муллаҡайҙар әйле ҡәбиләһенә ҡарайҙар. Сәмсетдинов Йосоп бабай ҙа, Ҡолмандың ҡушаматы «Ҡотһоҙ» булған, тигәйне. М.Ф. Чурко китабында ҡушымта булып Ҡолман улдары Ғәбдүк, Сысҡандың шәжәрәһе килтерелә. Шәжәрә буйынса Ҡолман, уның улдары XVI быуат кешеләре булып сығалар. Риүәйәттәрҙә Ҡолман барған батшаның исеме Иван Грозный, йә аҡ батша тип әйтелә. Белорет районы Кәрпесте ауылында йәшәгән Ғүмәр Кәримов ҡына, батшаға Ҡолмандың улдары Ғәбдүк, Сысҡан барған, тип ҡатыны Нурияға һөйләгән булған. Нурия әбей миңә, Сысҡан тугайында батшаға барыр алдынан төбөндә ултырып киткән имән дә бар, тип һөйләне бабайым, тигәйне.

Бына ошо Ҡолмандан[1] Инйәр буйы халҡы таралған, тип һөйләй риүәйәттәр. Уның улдары Ғәбдүк һәм Сысҡандың шәжәрәһен тулы килеш килтерәм (*187-се бит*).

Бына ошо шәжәрәгә тоташтыра алырлыҡ шәжәрәләрен белеүсе кешеләр инде ҡалмаған, тик Әхмәҙғәле бабай Ноғаманов ҡына үҙ шәжәрәһе тураһында, беҙҙең 16 быуын шәжәрә Асылағы Ямалниса әбейҙең Ҡөрьән китабы ситенә яҙылған булырға тейеш, тигәйне, үҙе уны Байрамғолға тиклем генә еткерә алды: Байрамғол — Мөхәмәткәрим — Фәхретдин — Нөғәмән — Әхмәҙғәле үҙе. Бабай, өләсәйем мин бәләкәй саҡта мине яратҡанда гел генә, Ҡолманым минең, Ҡолман нәҫеле бит һин, тип һөйләнә ине, тип иҫләй. Риүәйәттәрҙәге Инйәр ҡатайҙарының ырыу башы ысынлап та Ҡолман булғанлығына мин үҙемдең ҡатай яғынан шә-

---

[1] Н.К.Дмитриев яҙып алған легендала был ерҙәргә тәүләп Ҡармыш ҡарт килеп урынлашыуы әйтелә («Ватандаш», 2000, №10, 125-се б.). Уның бер улы Ҡалман булған (дөрөҫө Ҡолмандыр).



09-2001.p65 166 29.08.01, 12:51
Black




жәрәмде төҙөгәндә ышандым. Минең инәйем Ҡолмас ауылынан, уның инәһе Бибисара, атаһы Хәмзәнең шәжәрәләрен айырым өйрәнеп, бик күптәрҙең ярҙамы менән, тағы рәүиз материалдарын өйрәнеп, икәүһенең дә тамырҙары шул Ҡолманға тоташҡанлығын асыҡланым, Хәмзә олатайҙың быуындарын барлап Собханғолға еткерә алдым: Хәмзә—Шәфиҡ—Хәйрулла—Әһелетдин—Ғәйнулла—Кинйәғол—Әюп—Собханғол. Арышпарҙан Хәләф һәм Мәрйәм Фазлетдиновтар, Шәрифә Бәҙретдинова әбейем ярҙамында Бибисара өләсәйҙең нәҫелдәрен Туғыҙҡаҙыға еткерҙем: Бибисара—Ғәйшә—Бәҙретдин—Йосоп—Мөхәмәтйән—Игеҙәк—Осҡауыл—Собханғол—Һабанғол—Туғыҙҡаҙы. Артабан әле Белорет ҡалаһында йәшәгән уҡытыусы-пенсионер Вәлиәхмәт Хәбиәхмәтов (ул да үҙенең шәжәрәһен өйрәнә) менән хатлашып, Бибисара өләсәйҙең атаһы Абдулла яғынан шәжәрәһе шул уҡ Собханғолға тоташҡанлығын аңланым: Вәлиәхмәт ағайҙың балалыҡ дуҫы Абдулла (һуғышта һәләк булған) малай сағында, мин туғыҙ олатай беләм, тип һанап китә лә «Осҡауыл, Собханғол», тип бөтәрә торған булған. Абдулланың атаһы Нурғәле, уның атаһы Әбдрахман. Әбдрахман, Шәһивәли, Ғәйфулла, Сәфәрғәле, Абдулла олатай бер туғандар (Әбдрахмандан тағы ла Усманғәле Йосоповтар, Шәһивәлинән Йөйәктәге Шәһивәлиевтар, Ғәйфулланан Усманғәле Ғәйфуллиндар, Сәфәрғәленән Сәфәрғәлиндәр (Социалистик Хеҙмәт Геройы Сәғиҙә Мөхәмәтдинованың олатаһы) һ.б. таралған. Был дүрт бер туғандың аталары Әбдрәфиҡ, унан ары Әлибай (француз яуында көмөш миҙал менән наградланған), уның атаһы Аҙнабай. Туғыҙ быуын олатай һаналғас, Аҙнабай менән Осҡауыл араһында берике быуын булырға тейеш, тик уларҙы әлегә табып булманы. Вәлиәхмәт ағай инәһе Сабира һәм уның һеңлеһе Сәлиха ярҙамында үҙ шәжәрәһен минең алтынсы быуын олатай Ғәйнуллаға тоташтырған, тик уныңса Ғәйнулланан ары быуындар икенсерәк: Таһир—Яланҡаҙы—Ҡушҡаҙы. Ә минекенсә: Ғәйнулла—Кинйәғол—Әюп—Собханғол—Һабанғол—Туғыҙҡаҙы (был быуындарҙың дөрөҫлөгөн рәүиз материалдары ла раҫлай). Ошо хаттан һуң мин, шәжәрәмдәге Туғыҙҡаҙы Туғайҡаҙы түгелме икән, Туғайҡаҙы менән Яланҡаҙы бер үк кешеләр түгелме икән, Собханғол, Ҡолмас ауылдарының Ғәбдүк менән нәҫеллеге юҡмы икән, тип уйлай башланым. Ҡолмас ауылындағы ауылдаштар осрашыуында Хужин Ғәли ағай миңә өләсәһенән ишетеүе буйынса Ҡолмас, Собханғол (Урман Рәүәт тип тә йөрөтәләр), Арышпар һ.б. ауылдарҙың нәҫелдәре Сысҡандан (Ғәбдүктең икенсе исеме) сыҡҡан тине. М.Ф.Чурко ла Усманғәле волосы ауылдарының тәүбабаһы («родоначальник») Ҡолман тархан тиеүе, Йөйәктәге Нурғәле



09-2001.p65 167 29.08.01, 12:51
Black

Әхмәҙиев та: «Беҙҙең олатай Ҡолман дерхан булған», тип М.Биналовҡа яҙҙырған риүәйәте лә Ғәбдүк-Сысҡан шәжәрәһендәге туғыҙынсы быуын Ҡушҡаҙының Бибисара өләсәйҙең, Хәмзә олатайҙың һәм башҡа бик күптәрҙең туғыҙынсы быуын олаталары шул уҡ Ҡушҡаҙы булған, тип әйтергә нигеҙ бирә. Әхмәҙғәле бабай яҙҙырған Байрамғол араһы ла, Бибисара өләсәйҙең Абдулла атаһы яғынан шәжәрәһе лә, әле етмәгән 1-2 быуынды табып булһа, Ҡушҡаҙы аша Ҡолманға тоташҡанлығы һис шикһеҙ. Шулай уҡ Бирҙеғол ауылының сығышы Сысҡан ауылы Ғәбдүк һәм Байҙаш тигән кешеләрҙән килә.

Ҡатайҙарҙың быуындан-быуынға күсеп килгән шәжәрәләре лә булған, ул Әхмәҙғәле бабайҙың атаһында һаҡланған, тик 37-се йылдарҙа Нөғәмән бабай бөтә дини китаптар менән бергә шәжәрәне лә һарай артына ергә күмеп йәшерә, тик ул урынды аҙаҡ таба алмауҙары ғына ҡыҙғаныс.

Йөйәк ауылының боронғораҡ тарихына төшкән саҡта бына шулай ҡатайҙарҙың башҡа ауылдары тарихына ла ҡағылырға тура килде, сөнки ул ауылдарҙың яҙмыштары уртаҡ.

Ауыл борон бер урында ғына булмай, Үргеҡышлау (Үрғышлау), Арғыҡышлау (Арғышлау), Иҫкеауыл, Түбәнге ауыл тигән урындар шул турала һөйләй. Ауылдың боронғолоғон раҫлаусы бер дәлил булып хәҙер өсөнсө зыярат булғанлығын да әйтергә кәрәк. «Оло ялан» зыяратын бик боронғо тип иҫәпләйҙәр, уны икенсе төрлө «Изгеләр зыяраты» тип тә йөрөтәләр. Унда халыҡ араһында ныҡ танылыу тапҡандарҙы, уҡымышлыларҙы, дин эшендә үҙен фиҙа ҡылғандарҙы ерләгәндәр, яҡын-тирә ауылдарҙан ғына түгел, хатта Илмәш, Айыс яҡтарынан да изгеләрҙе шунда күмгәндәр. Был урында бик борон изге тип танылған кеше ерләнеп, аҙаҡтан шулай изгеләр зыяраты булып киткәндер. Революцияға тиклем бик юғары дәрәжәле дин әһеле Шәрифулла ахундың да Йөйәктә йәшәүе был фекерҙе ҡеүәтләү булып торалыр.

Тағы ла бер миҫал. Йөйәк ауылынан йыраҡ түгел Бирйән тауы һыртында ҡатайҙарҙың Һынташ исемле тағы ла бер изге урыны булған. Башҡорттар ислам дине ингәс тә уларҙа мәжүсилек замандарынан ҡалған ышаныуҙар һаҡланған, һәр бер төбәктең изге тип һаналған тауы, ҡаяһы, урманы булған. Ул ергә килеп табынғандар, баҡыр аҡсалар, биҙәүестәр, туҡыма йыртыштары һалғандар, ырыу, ғаилә тамғаларын ҡалдырғандар. Һынташ беҙҙең тирә ауылдарҙың шундай урыны һаналған (Йәйташ исемле урын да бар). Бирйән тауы яҡынтирәлә иң бейек урындарҙың береһе, Һынташ ҡаяһы аҫтында тороп өҫкә ҡараһаң, ер менән күк тоташҡан, болоттар ҡаяға тейә яҙып үткән кеүек, аяҙ көндә бөтә тирә-яҡ ус төбөндәге һымаҡ күренә. Ҡая төбөндә ҡорбан сала торған урынға оҡшаған тигеҙ генә таш та бар, уның өҫтө әҙерәк эскә батып та тора. Һынташҡа табыныу, уға арнап ҡорбан салыуҙар булғас, мин Бирйән тауының исеме лә ошо изге Һынташҡа бағышлап ҡорбан салыу, уларҙың йәндәрен уға биреү йолаһынан килеп сыҡмағанмы икән, тигән фекергә килдем («йән бир!» — Бирйән).

Ауыл тирәһендә таш быуат замандарында ла кеше йәшәгәндер, тигән фекергә ауыл уртаһындағы осраҡлы бер табыш сәбәп булды. Ул — таштан яһалған һеңгө башы.

Ауыл халҡы элек-электән малсылыҡ менән шөғөлләнгән, XIX быуаттың икенсе яртыһында урман кәсебе өҫтөнлөк итә башлаған, игенселек менән дә шөғөлләнеүҙәре билдәле — ауылда мәктәп музейына йыйған әйберҙәр араһында игенселек әйберҙәре лә байтаҡ, «Игеннәр» тигән ер-урын атамаһы ла шуға дәлил. Солоҡсолоҡ та ярайһы таралған булған, яҡын-тирә ауылдарҙан тик йөйәктәр генә Өфөлә сауҙагәрҙәрҙән аҡса алып тороп, баллата түләргә килешеүҙәре тураһында мәғлүмәттәр байтаҡ. Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ауылда тик ярҙамсы роль ғына үтәгән.

Йөйәктәр бөтә башҡорт ихтилалдарында ла ҡатнашҡан, Ҡараһаҡал яуында уларҙың ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр һаҡланған. Хатта Архангель районы менән сиктәш урында «Ҡара кеше» тигән урынды ошо Ҡараһаҡал менән бәйләүселәр бар ине. Тик Ғәбдүк ауылынан Баязитов Сәғәҙәт бабай



09-2001.p65 168 29.08.01, 12:51
Black

ғына был урын Бүгәсәү яуы менән бәйле тигәйне. Йәнәһе, ул урындан Ҡараһаҡал («Ҡара кеше») үтмәгән, ә ҡара һаҡаллы Бүгәсәү үткән.

1773—1775 йылдарҙағы ихтилалда өс ҡатай старшинаһы отрядтары Нуғай юлында хәрәкәттә ҡатнашыуҙары билдәле. Йөйәк менән Ғәбдүк ауылдары араһында «Старшина ултырышы» тип аталған урын булған (хәҙер был атама онотолған), Йөйәктән Дауыт исемле берәү һәр өйҙән берәр һуғышсы алып китеп, шул урында туплап Өфө яғына ебәреп торған. Риүәйәт ысынбарлыҡты сағылдыра — документтарҙа ҡатайҙарҙың ҡумрыҡтар менән бергә Архангель заводынан Инйәр йылғаһы буйлап 50 саҡырымлап өҫтә лагерь ҡороп ятыуы, шул ерҙән тирә-яҡ заводтарға, ауылдарға һөжүм яһауҙары әйтелә.

1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуҙары тураһында Шәһисолтанов Миңлеғәле ағайҙың картуф баҡсаһында улы Нәфилдең шул датаның 100 йыллығына арнап сығарылған миҙал табып алыуы һөйләй. Был миҙал менән һуғышта ҡатнашыусының вариҫтары 100 йыл үткәндән һуң 1912 йылда бүләкләнгәндәр.

М.Ф.Чурко Йөйәк ҡарттарының Ҡытайға походтары тураһында иҫләүҙәрен яҙа ла, был Перовскийҙың Хива походылыр, тип ҡуя. Шуларҙыр, бәлки, 1771 йылда Джунгарияға күсенеүсе ҡалмыҡтарҙы эҙәрлекләп барыу походы булғандыр.

Хәҙер XIX быуаттың беренсе яртыһында халыҡ иҫәбен алыу материалдары буйынса ауыл халҡын, шул кешеләргә бәйле ҡайһы бер ваҡиғалар тураһында, әлеге ваҡыттағы нәҫел-нәсәптәрен дауам итеүселәр кемдәр икәнлеген тасуир итеүгә күсәйек.

1795 йылғы 5-се халыҡ иҫәбен алыу буйынса, ауылда бөтәһе 42 хужалыҡ булып, унда 179 кеше йәшәгән.

1834 йылда ауылда 47 хужалыҡ, унда бөтәһе 162 ир, 118 ҡатын-ҡыҙ йәшәй. 1859 йылда иһә 42 хужалыҡта 135 ир, 134 ҡатын-ҡыҙ йәшәй.

Күп ҡатынлы ғаиләләр һаны буйынса Йөйәк ауылы башҡа ауылдарҙан әллә ни айырылып тормай, 1834 йылда ике ҡатынлы 7 ғаилә булһа, 1859 йылда улар 13 булып киткән: өс йә дүрт ҡатынлылар, ғөмүмән, ҡатайҙарҙа осрамай (бер генә осраҡ). Кәләште үҙ араларынан алмағандар. Ауылдағы башҡа араларҙан кәләш алыусылар бар, мәҫәлән, 1859 йылғы 10-сы рәүиз материалдарынан күренеүенсә, утыҙ туғыҙынсы хужалыҡта Ҡоҙашман Ҡоҙаҡаев икенсе ҡатынлыҡҡа Ишембай Ҡотлобаевтың ҡыҙын алғанлығы билдәле, ундай осраҡтар бер нисә. Күбеһенсә ғаиләләрҙә күрше-тирә ауылдарҙан йәрәшелгән парҙар. Сөнки, фамилиялар буйынса ҡараһаң, күп кенә ғаиләлә ҡатындарының фамилиялары Йөйәк ауылында бөтөнләй осрамай: Ғәйәкбәрова, Рамазанова, Ҡорбанғәлина, Әбделвәхитова, Йәнюлдашева, Ильясова, Хәбирова, Хәсәнбаева, Әбделғәзизова, Аптраҡова, Кәлимуллина. Сәфәрғәлина, Аҙнаголова, Иҡсанова, Мәсәғүтова, Ҡаҙаҡҡолова, Сәйфетдинова, Нуғмәтуллина, Аҡҡулова, Баталова, Хөрмәтова, Бидранова һ.б.

Байтаҡ ҡына осраҡтарҙа ирҙәрҙең ҡатындары үҙҙәренән байтаҡҡа өлкәнерәк. Был күренеште левират менән аңлатырға булалыр. Ғаиләлә өлкән өйләнгән ул вафат булып ҡалһа, күп осраҡта киленгә эйәреп килгән мөлкәтте кире ҡайтармаҫ өсөн, балаларҙы йәтим итмәҫ өсөн кесе улын тол ҡалған киленгә өйләндергәндәр. Бындай осраҡтар йола буйынса Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да булғылаған, ағалары һуғыштан ҡайтмағас, иҫән ҡайтҡан ҡәйнештәре еңгәләренең йортона кергәндәр. Шаҡтай өлкән ир-аттың үҙенән күпкә йәш, хатта бергә йәшәгән улынан да йәшерәк ҡатын алыу осраҡтары күҙәтелә: 1834 йылда утыҙынсы хужалыҡта 55 йәшлек Солтанғол Рәхимғолов ун һигеҙ йәшлек Юллыбикә менән йәшәп ята, ә 32 йәшлек улы Ҡотлогилде өйләнмәгән, «үгәй әсәһе» тәрбиәһендә йәшәй. Дөйөм алғанда, ауылда егеттәр егермене үткәс өйләнеүҙәре күҙәтелә, мәҫәлән, 1834 йылда 19 йәштән өлкән (ҡырҡты уҙғандарҙы ла һанап) егерме ир-ат өйләнмәгән. Мәҫәлән, Солтанморат Рәхимғоловтың (8-се рәүиз, утыҙ беренсе хужалыҡ) 22 йәшлек Баһаүетдины, 20 йәшлек Хәсәне, 19 йәшлек Хөснөтдине өйләнмәгән, Баһаүетдиндең 1859 йылда инде өлкән улы ун етелә, тимәк ул утыҙға етер



09-2001.p65 169 29.08.01, 12:51
Black

саҡта ғына өйләнгән, Хәсәндең был ваҡытта икенсе ҡатыны бар, тәүге ҡатынын да утыҙ йәштәр самаһында алған, тәүге улы 1847 йылғы (дүрт йәшендә үлгән). Өйләнгән улдары, өйләнгән туғандар бер ғаилә булып иҫәпләнеүен күҙәтәбеҙ. Бер йортта, гәҙәттә, 2-3 быуындан артыҡ йәшәмәгәндәр (ата — өйләнгән ул — өйләнгән ейән). Ауылда күберәк бәләкәй ғаиләләр йәшәй (атай, өйләнмәгән улдар), улар һаны ике рәүиз буйынса ла 22 ғаилә. Атай һәм өйләнгән малайҙары бергә йәшәгән ғаиләләр тәүҙә 12 булһа, 10-сы рәүиздә 8-гә ҡалған; туғандар ғаиләһе — өйләнгән бер туғандар, ике туғандар 1834 йылда өсәү булһа, 1859 йылда улар һаны 14-кә еткән. Ауылдың халҡы сағыштырмаса ярлы йәшәгәндер, шуның өсөн дә өй һалырға, йә донъя көтә башларлыҡ мал-тыуар бүлеүгә мөмкинселек булмаһа, өйләнгән улдар ҙа, атай үлһә, өйләнгән туғандар ҙа бергә йәшәүен дауам иткәндәр. Күп осраҡта атай үлгәндән һуң һәр өйләнгән ул айырым донъя көтә башлаған, ҙур ғаилә тарҡалған.

Йөйәк ауылы кантон идаралығы ваҡытында тәүҙә алтынсы кантондың ун өсөнсө йортона, артабанғы үҙгәрештәрҙән һуң етенсе кантондың утыҙынсы йортона ҡараған, кантон идаралығы бөтөрөлгәндән һуң Верхурал өйәҙе, Ҡатай волосы, Асы ауыл йәмғиәтенең Йөйәк ауылы тип йөрөтөлгән. Совет власы урынлашҡас Тамьян-Ҡатай кантонының Усманғәле волосына ҡараған, 1930 йылда Асы ауыл советына инеп, яңы ойошторолған Белорет районына ҡарай башлай, ә 1980 йылда Йөйәк һәм Ғәбдүк ауылдары Йөйәк ауыл советына берләште.

Инйәр буйында XIX быуаттың икенсе яртыһында Лаптев, Колотов, Куликов һ.б. бик күп урман промышленниктарының эшмәкәрлеге йәнләнә. Ауыл халҡы тормошо менән ошо өсәүҙең эшмәкәрлеге бәйле булғас, ҡалғандарын һанап тормайым. Ғәбдүк ауылы аҫтында Леонтий Федорович Куликов, Йөйәктә, Асыла Петр Васильевич Колотов ҙур ерҙәрҙе эләктерәләр. Лаптев исеме менән әле йөйәктәрҙең тауы Ҡарағас итәгендәге ҙур ялан-дар йөрөтөлә, ул үҙ компаньондары менән ҡатайҙарҙың ҙур-ҙур урман майҙандарын арендаға алып, йыл һайын диләнкәләр бүлеп, орлоҡҡа тигән ағастарҙы ҡалдырып ҡырҡырға тейеш булһалар ҙа, бер нисә йыл эсендә бөтә майҙанды ҡырып һалалар. Ремезов уға арнап билдәле китабында «Урман ҡырыусы» тигән очерк яҙған.Ф.М.Чурко башҡорт урмандарының ҡот осҡос таланыуы, башҡорттар «наш урман кончать нельзя» тип үҙҙәрен йыуатыуҙары, тик хәҙер бер нисә тиҫтә йылдар үткәндән һуң нисек итеп урмандарынан ҡолаҡ ҡаға барыуҙары хаҡында яҙа. Элек үтеп сыҡҡыһыҙ урындарҙа хәҙер ялан-ғас тау ҡырластарының ғына һерәйеп тороуы хәҙер урманды бөтөрөп булыуы мөмкин икәнлеген иҫбатланы, ти крайҙы өйрәнеүсе. Башҡорттарҙың үҙ урмандарын үҙҙәре һатып, үҙҙәре үк шул ағастарҙы эшкәртеүгә ялланыуҙары, үҙ көстәре менән шул эшмәкәрлекте башҡара алмауҙарына ғәжәпләнә крайҙы өйрәнеүсе.

Бына шулай, әкренләп, башҡорт ауылдары төрлө юлдар менән капиталистик мөнәсәбәттәргә дусар ителәләр, ерҙәренән яҙалар, урмандарын ҡырҙыртала р, ялланма эшселәргә, батрактарға әүереләләр, сауҙа мөнәсәбәттәренә йәлеп ителәләр. Башҡорттарҙың үҙҙәренең араһында ла ҡырҡтартмасылар, магазин асыусылар күренә башлай. Асыла, мәҫәлән, Мөхәмәтзариф Әбдрәшитов магазин аса.

Ауылыбыҙҙа мәҙрәсә лә булған. Яҡын-тирәләге данлыҡлы мәҙрәсәләрҙән ауылдаштарым өсөн Үтәк мәҙрәсәһе ҡулайыраҡ булған, күбеһе шунда барып белем алған, Зәйнулла Рәсүлевтең Троицкийҙағы мәҙрәсәһендә уҡып ҡайтҡандар ҙа булған. Шулар араһынан Сәғәҙәтов Хәйретдин заманында ауыл советы рәйесе вазифаһын башҡарған.

Урыҫ-япон һуғышында байтаҡ кеше ҡатнаша, шуларҙан Шәрәфетдинов Заһит менән Хөббихужин Йәнсегүр — Георгий миҙалы кавалерҙары. Йәнсегүр унтер-офицер булып та ҡайтҡан. Рәсәйҙәге бөтә ваҡиғалар ҙа Йөйәк ауылын урап үтмәгән.



09-2001.p65 170 29.08.01, 12:51
Black